Ҡаралды һәм ҡабул ителде:
Педагогик кәңәшмә ултырышы
Протокол № 1
«31» август 2023 йыл

Килешелде:
Уҡыу-тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары
____ Л. Р. Хисаметдинова
« 31» август 2023 йыл

Раҫланды:
Т.Йосопов исемендәге республика лицей-интернат директоры бойороғо
« 31» август 2023 йыл
№_____

# Башҡорт теле буйынса 10-11-се кластар өсөн эш программаһы

Эш программаһын төҙөүселәр:
Баева Гүзәлиә Рид ҡыҙы,
Нуриева Әлфирә Йәмил ҡыҙы,
юғары категориялы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары

Мәсәғүт
2023

**Аңлатма яҙыу**

Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән укытыу туған(башкорт)телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-11-се кластар өсөн «Башҡорт теле» предметы буйынса белем биреү өлгө программалар нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүсеһе: Ғәбитова З.М., Өфө: Китап, 2017. – 72 бит.

**Программаға дөйөм характеристика:**

Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа Дыуан районы республика лицей-интернаты дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһының «Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла. Эш программаһы Дыуан районы республика лицей-интернатының 10-11 -се класы өсөн төҙөлгән. Бөтәһе 101 сәғәткә бүленгән. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнгән, йәки регионларҙан килгән һәм бөтөнләй башҡорт телен белмәгән тәрбиәләнеүселәргә тәржемә, карточкалар менән эш, күсереп яҙыу, диалогтар төҙөү кеүек айырым эш төрҙәре бирелә. Дәрестәрҙә фонетика, синтаксис бүлектәрен ҡабатлау, V-IX кластарҙа алған белемдәрен системаға килтереү, һүҙҙәргә морфологик анализ яһау күҙ уңында тотола. Тәрбиәләнеүселәрҙең аң-белемдәрен үҙләштереү, фекерләү ҡеүәһен үҫтереүҙә башҡорт теле бөтә предметтар менән (рус теле һәм әҙәбиәте, Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте, тарих, йыр, рәсем, география) тығыҙ бәйләнештә тора һәм күнекмәләрҙе үҙләштереү сифатына йоғонто яһай.

**Башҡорт теленә өйрәтеүҙең маҡсаты һәм бурыстары**

Тәрбиәләнеүселәргә мәктәптә башҡорт телен өйрәтеүҙең байтаҡ үҙенсәлектәре бар. Уларҙың иң мөһимдәрен һанап китәбеҙ:

-Уҡыусыларҙы башҡорт әҙәби телендә дөрөҫ һөйләшергә, практик файҙаланырға өйрәтеү - үҙәк бурыс.

- 10-11-се класта башҡорт телен өйрәнеү өсөн уҡытыу планында аҙнаға бер сәғәт ваҡыт бирелә. Был дәрестәрҙә балаларҙы башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик нормалары буйынса белем һәм күнекмәләр биреү. Тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәнелә (интеграция).

-Үҙ фекеренде билдәле бер кимәлдә бәйләнешле итеп һөйләй һәм яҙа алыу күнекмәләрен формалаштырыу.

-Башҡорт теле мотлаҡ практик рәүештә өйрәнелә. Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

- Тәрбиәләнеүселәрҙе башҡорт әҙәби телендә дөрөҫ һөйләшергә, өйҙә, йәмғәт урындарында, хеҙмәт процесында башҡорт әҙәби телен практик файҙаланырға өйрәтеү.

- Башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик нормалары буйынса белем һәм күнекмәләр биреү.

-Үҙ фекеренде бәйләнешле итеп һөйләй һәм дөрөҫ яҙыу күнекмәләрен формалаштырыу.

- Телде өйрәнеү барышында тәрбиәләнеүселәрҙе башҡорт халҡының фәһемле тарихы, бай мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, башҡорт йолалары, күренекле шәхестәре,тыуған илдең тәбиғәте менән таныштырыу,башҡорт халҡына, теленә, үҙе йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.

**Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар**

Уҡыу йылы аҙағында 10-11-се класс тәрбиәләнеүселәре түбәндәге белем һәм күнекмәләргә эйә булырға тейештәр:

- йәмғиәт тормошонда телдең роле;
- синтаксис, стилистика; тыныш билдәләре, текст, һөйләм, һүҙбәйләнеш; ҡушма һөйләм төшөнсәләре;
- фонетика, телмәр өндәре,ижек, һүҙ баҫымы, һуҙынҡыһәм тартынҡы өндәр; өндәрҙең бер-береһенә оҡшашыуы (сингармонизм) төшөнсәләре;
- орфоэпия (дөрөҫ әйтелеш), төп орфоэпик норма төшөнсәләре;

- орфография, һуҙынҡыларҙың һәм тартынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы, һуҙынҡыларҙың һәм тартынҡыларҙың һүҙҙең тамырында. Ялғауҙарҙа һәм һүҙ араһында яҙылышы һәм әйтелеше, һүҙҙе юлдан юлға күсереү;
- лексика, һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәһе. һүҙҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе; синонидар, антонимдар, омонимдар;
- грамматика, морфема; тамыр, нигеҙ, яһаусы ялғау. Үҙгәртеүсе ялғау, тамырҙаш һүҙҙәр, һүҙьяһалыш юлдары;
- йәнле һөйләү,фәнни. күркәм стилдәр;
- телмәр төрҙәре; хикәйәләү,тасуирлау, хөкөм сығарыу.
- телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү;
- төрлө стилдәге һәм жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;
- төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу, һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу,электрон ҡулланмаларҙан кәрәкле мәғлүмәтте һайлап алыу күнекмәләрен булдырыу;
- тыңланған йә уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә һөйләй алыу;
- төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең стилистик нормаларын һәм яҙма телдә төп орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе һаҡлау;
- башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын, башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;
- тел-һүрәтләү саралары һәм уларҙы үҙ телмәреңдә ҡулланыу.

**Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштырылған яҙма эштәрҙең бүленеше һәм үткәреү тәртибе**

Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.

Уларға түбәндәгеләр инә:

– төрлө типтағы күнегеүҙәр;
– тестар;
– тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
– дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
– һорауҙарға яҙма яуаптар, диктанттар, изложениелар һәм иншалар;
– тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар һ.б. төҙөү.

Башҡорт теленән ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеш диктант, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Уҡыу йылы башында инеш диктант, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалын үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала:

| Кластар | Изложение | Инша | Контроль диктант | Эш ҡағыҙҙарын яҙырға өйрәтеү | Бөтә сәғәттәр һаны |
|---|---|---|---|---|---|
| 10 | 2 | 2 | 4 | 1 | 9 |
| 11 | 2 | 2 | 4 | 1 | 9 |

## Уҡыу предметының төп йөкмәткеһе

**Программа йөкмәткеһе 3 йүнәлештән тора:**

-телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу;
-телдең системаһын ( фонетика, орфография, орфоэпия, грамматика, пунктуация) өйрәнеү;
-бәйләнешле текст менән эшләргә өйрәтеүҙе күҙ уңында тота. Шулай уҡ унда милли тәрбиә тураһында ла мәсьәлә күтәрелә**.**

Тел материалын эре блоктар алымы менән өйрәнеү тәҡдим ителә һәм башҡорт теленең күренештәрен айырым кластарға бүлеп өйрәнеү өсөн түбәндәге блоктар тәҡдим ителә:

**Тел һәм телмәр.(2с.)** Тел һәм уның вазифаһы. Башҡорт теленең функциональ үҫеше. Башҡорт теле ҡәрҙәш телдәр араһында. Үле һәм тере телдәр. Телмәр мәҙәниәте. Дөрөҫ әйтелеш нормалары.

**Лексика.(3с.)** Башҡорт теленең һүҙлек составы. Һүҙҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе.Һүҙҙәрҙең килеп сығышы буйынса төркөмләнеүе. Башҡорт телендә дөйөм ҡулланылышлы һүҙҙәр. Интернациональ һүҙҙәр. Профессиональ һүҙҙәр. Иҫкергән һәм яңы һүҙҙәр. Диалект һүҙҙәр. Фразеологик берәмектәр.

**Фонетика. Орфоэпия.(4с.)** Интонация. Ижек. Баҫым. Һуҙынҡы өндәр. Редукция. Тартынҡы өндәр. Орфоэпия. Орфография. Графика.

**Һүҙ составы һәм һүҙьяһалыш.(2с.)** Телдә һүҙьяһалыш ысулдары. Һүҙьяһалыш һәм стилистика.

**Морфология. (13с.)**Исем. Сифат. Һан. Алмаш. Ҡылым.

**Рәүеш.(1с.)**

**Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре.(2с.)** Бәйләүес. Теркәүес. Ымлыҡ.

**Синтаксис.(19с.)** Һүҙбәйләнеш. Ябай, ҡушма һөйләмдәр.Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр. **Теҙемдәр.(3с.)** Тура һәм ситләтелгән телмәр. Текст синтаксисы, композицияһы

### Х класс өсөн башҡорт теленән календарь - тематик план
### (Аҙнаһына 2 дәрес)

| № | Дәрес темаһы |
|---|---|
| 1 | Тел һәм уның вазифаһы. |
| 2 | Башҡорт теленең функциональ үҫеше. |
| 3 | Инеш контроль диктант №1 «Ҡулдар йылыһы» |
| 4 | Башҡорт теле ҡәрҙәш телдәр араһында |
| 5 | Үле һәм тере телдәр |
| 6 | Телмәр мәҙәниәте |
| 7 | Омонимдар |
| 8 | Синонимдар |
| 9 | Антонимдар |
| 10 | Төп башҡорт һүҙҙәре |
| 11 | Үҙләштерелгән һүҙҙәр. |
| 12 | Калькалар |
| 13 | Неологизмдар |
| 14 | Профессионализмдар |
| 15 | Диалект һүҙҙәр |
| 16 | Терминдар, һүҙлектәр |
| 17 | Фразеология, фразеологик һүҙлек |
| 18 | Инша «Тырышлыҡ – ҙурлыҡ, ялҡаулыҡ - хурлыҡ» |
| 19 | Фонетика |
| 20 | Интонация |
| 21 | Ижек |
| 22 | Баҫым |
| 23 | Һуҙынҡы өндәр. |
| 24 | Һүҙҙәргә фонетик анализ эшләү |

| | |
|---|---|
| 25 | Редукция, протеза |
| 26 | Эпентеза, элизия |
| 27 | Тартынҡы өндәр. |
| 28 | Орфоэпия |
| 29 | Орфография. |
| 30 | Графика |
| 31 | Изложение |
| 32 | Һүҙьяһалыш |
| 33 | Телдә һүҙьяһалыш ысулдары |
| 34 | Һүҙьяһалыш һәм стилистика |
| 35 | **Контроль диктант № 2 «Аҡмулла»** |
| 36 | Эш ҡағыҙҙарын яҙырға өйрәтеү |
| 37 | Беренсе ярты йыллыҡта үтелгәндәр буйынса ҡабатлау |
| 38 | Башҡорт телендә һүҙ төркөмдәре |
| 39 | Исем |
| 40 | Исемдәрҙең эйәлек категорияһы |
| 41 | Исемдәрҙең хәбәрлек категорияһы |
| 42 | Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше |
| 43 | Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше |
| 44 | Сифат |
| 45 | Т.ү. Инша «Беҙ – тәбиғәт балалары» |
| 46 | Һан |
| 47 | **Контроль диктант № 3 «Хәтер ҡалыу»** |
| 48 | Алмаш |
| 49 | Алмаштарҙың стилистик мөмкинлектәре |
| 50 | Өйрәтеүле диктант |
| 51 | Ҡылым. |
| 52 | Ҡылым һөйкәлештәре. Хәбәр һөйкәлеше |
| 53 | Бойороҡ һөйкәлеше. |
| 54 | Шарт һөйкәлеше |
| 55 | Теләк һөйкәлеше |
| 56 | Йүнәлеш ҡатегорияһы |
| 57 | Изложение |
| 58 | Ҡылым төркөмсәләре. |
| 59 | Сифат ҡылым |
| 60 | Хәл ҡылым |
| 61 | Исем ҡылым. |
| 62 | Уртаҡ ҡылым. |
| 63 | Инша «Тыуған яғыма яҙ килде» |
| 64 | Ҡылым күләмдәре |
| 65 | Ҡылым рәүешлеге |
| 66 | **Йыллыҡ аттестацион эш**<br>**Контроль диктант № 4 «Сихри моң»** |
| 67 | Ҡылым буйынса үтелгәнде ҡабатлау. Йомғаҡлау. |
| 68 | Йыллыҡ үтелгәндәрҙе ҡабатлау |

| № | Дәрес темаһы |
|---|---|
| | **Тел һәм телмәр** |
| 1 | Тел һәм уның вазифаһы. Функциональ үҫеше. |
| 2 | **Инеш контроль диктант №1 «Ҡулдар йылыһы»** |
| 3 | Телмәр мәҙәниәте |
| | **Лексика.** |
| 4 | Омонимдар,синонимдар,антонимдар,төпбашҠорт, үҙләштерелгән һүҙҙәр. |
| 5 | Калькалар,неологизмдар,профессионализмдар,диалект һүҙҙәр,терминдар,һүҙлектәр |
| 6 | Фразеология, фразеологик һүҙлек |
| 7 | Инша «Тырышлыҡ – ҙурлыҡ, ялҠаулыҠ - хурлыҠ» |
| | **Фонетика, орфоэпия.** |
| 8 | Интонация, ижек, баҫым. |

| | |
|---|---|
| 9 | Һуҙынҡы өндәр.Редукция, протеза, эпентеза, элизия |
| 10 | Тартынҡы өндәр. |
| 11 | Орфоэпия,графика, орфография. |
| 12 | Изложение |
| | **Һүҙ составы һәм Һүҙьяһалыш** |
| 13 | Телдә һүҙьяһалыш ысулдары |
| 14 | Һүҙьяһалыш һәм стилистика |
| 15 | **Контроль диктант № 2 «Аҡмулла»** |
| 16 | Эш ҡағыҙҙарын яҙырға өйрәтеү |
| 17 | Беренсе ярты йыллыҡта үтелгәндәр буйынса ҡабатлау |
| | **Грамматика. Морфология** |
| 18 | Башҡорт телендә һүҙ төркөмдәре. Исем. |
| 19 | Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше |
| 20 | Сифат |
| 21 | Инша. |
| 22 | Һан |
| 23 | **Контроль диктант № 3 «Хәтер ҡалыу»** |
| 24 | Алмаш |
| 25 | Ҡылым. |
| 26 | Ҡылым һөйкәлештәре. Хәбәр, бойороҡ һөйкәлеше. |
| 27 | Ҡылым һөйкәлештәре. Шарт, теләк һөйкәлеше |
| 28 | Изложение |
| 29 | Ҡылым төркөмсәләре. Сифат ҡылым |
| 30 | Хәл ҡылым |
| 31 | Исем ҡылым. Уртаҡ ҡылым. |
| 32 | Ҡылым күләмдәре, рәүешлеге |
| 33 | **Контроль диктант № 4 «Сихри моң»** |
| 34 | Ҡылым буйынса үтелгәнде ҡабатлау. |
| 35 | Унынсы класта үтелгәндәрҙе йомғаҡлау |

## XI класс өсөн башҡорт теленән дәрестәрҙең тематик планы

| № | Дәрес темаһы |
|---|---|
| | **Рәүеш** |
| 1 | Рәүеш, уның телмәрҙә ҡулланылышы, рәүеш дәрәжәләре |
| | **Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре** |
| 2 | **Инеш контроль диктант № 1 «Ағиҙел буйында»** |
| 3 | Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. Бәйләүестәр, теркәүестәр, киҫәксәләр |
| 4 | Модаль, оҡшатыу, саҡырыу һүҙҙәре. Ымлыҡтар. |
| 5 | Инша |
| | **Синтаксис** |
| 6 | Синтаксистың бераәмектәре. Һүҙбәйләнеш. |
| 7 | Һөйләм. Һәйләм төрҙәре. |
| 8 | Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре |
| 9 | **Контроль диктант № 2 «Күҙ алдында яңы көн тыуа»** |
| 10 | Һөйләмдең тиң һәм айырымланған эйәрсән киҫәктәре |
| 11 | Хәл әйтеме, уның айырымланыуы |
| 12 | Инша |
| 13 | Бер составлы билдәле, билдәһеҙ эйәле һөйләмдәр |
| 14 | Эйәһеҙ, атама, кәм һөйләмдәр |
| 15 | Изложение |
| 16 | Өндәш һүҙ. |
| 17 | **Контроль диктант № 3 «Яҙ көнө»** |
| 18 | Инеш һүҙ, инеш һөйләмдәр |
| 19 | Ҡушма һөйләм. Теҙмә ҡушма һөйләмдәр |
| 20 | Эйәртеүле ҡушма һөйләм. Эйә, хәбәр һөйләмдәр. |
| 21 | Эш ҡағыҙҙарын яҙырға өйрәтеү |

| | |
|---|---|
| 22 | Аныҡлаусы, тултырыусы  һөйләмдәр |
| 23 | Хәл һөйләмдең  төрҙәре.Ваҡыт, урын һөйләмдәр |
| 24 | Рәүеш, күләм-дәрәжә һөйләмдәр |
| 25 | Маҡсат, сәбәп, шарт, кире һөйләмдәр. |
| 26 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау |
| 27 | Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр. |
| 28 | Ҡатнаш  ҡушма һөйләм |
| 29 | **Теҙемдәр.** |
| 30 | Тура һәм ситләтелгән телмәр. |
| 31 | Текст синтаксисы һәм композицияһы |
| 32 | **Контроль диктант № 4 «Тыуған йорт»** |
| 33 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау |
| | |